■ Ғилем һәм ғәмәл

# АЛЛАҺЫ ТӘҒӘЛӘНЕҢ БАРЛЫҒЫН БЕЛЕП, ТОЙОП ЙӘШӘ! ШУЛ САҠТА ТОРМОШОҢ МӘҒӘНӘЛЕ БУЛЫР

Аллаһы Тәғәлә бар. Быының шулай икәне һауаның, елдең барлығы кеүек үк бәхәсһеҙ. Елде маңлай күҙе менән күреп булмай, ләкин уның үҙен тойҙорғанын, йәғни эҙемтәләрен, емештәрен күрәбеҙ. Шулай уҡ берәүҙең дә һауаны күргәне юҡ, ләкин уның барлығын инҡар итмәйбеҙ: һауа булмаһа беҙ тын ала алмаç инек. Аллаһы Тәғәләнең барлығы бына шулай ап-асыҡ, ләкин ни өсөндөр ҡайһы берәүҙәр тарафынан Уның барлығы шик аҫтына алына. Быындай әҙәмдәрҙе лә аңлап була һымаҡ. Әгәр ҙә кеше бер ҡасан да һауа менән тын алмаған, ә тик кислород мендәрен генә ҡулланған булһа һәм һауа барлығы тураһында бүтәндәрҙән ишетһә, быға ышанмаç ине. Һуҡыр кеше лә тормоштоң төрлө төҫтә икәнен күрә алмай, ләкин ышанырға тейеш. Һуҡыр кеше ҡараңғылыҡ эсендә йәшәй, тимәк төрлө төç барлығына ышаныуы уға бик еңел генә түгел. Шул уҡ ваҡытта әҙәм балаһы ҡасандыр Лев Толстой тигән яҙыусының был донъяла йәшәп киткәнен белә. Замандаштарыбыҙҙың береһе лә Толстой әфәндене күрмәгән, ләкин бөтәһе лә уның ҡасандыр йәшәгәненә шик тотмай. Ни өсөн Толстойға ышаналар, ә Мәскәй әбейгә юҡ? Сөнки уның уйҙырма икәне бөтәһенә лә мәғлүм. Берәү ҙә Мәскәйҙең эш-ғәмәл һөҙөмтәләрен күрмәгән, бала саҡта күргән төшөн иçәпкә алмағанда, әлбиттә. Ә бына бөйөк яҙыусының тормошо тураһында замандаштары ҡалдырған яҙмалар күп, фотолары һаҡлана. Эшмәкәрлек емештәре - китаптары - беҙҙең көндәргә килеп еткән. Шуларҙан һығымта яһайбыҙ - Л.Н.Толстой - реаль шәхес. Быны икенсе төрлө "ышаныу" йәки "белем" тип тә атарға мөмкин. Берәү ҙә: "Ә Толстой булдымы икән донъяла?" - тигән һорау бирмәй. Беҙ хатта ошо бөйөк рус яҙыусыһынан күпкә алда йәшәгән Аристотель тураһында ла хәбәрҙарбыҙ. Быны дәлилләгән документтар бар. Әлеге шәхестәрҙе күреүҙән мәхрүм булһаҡ та, улар менән аралашҡан бер кеше менән дә һөйләшә алмаһаҡ та, ҡасандыр йәшәгәндәренә шик тотмайбыҙ. Аристотель яҙып ҡалдырғандарҙы уҡығандан һуң: "Ә быны Аристотель түгел, икенсе аҡыл эйәһе яҙған булһа?" - тигән һорауҙы ла ҡуймайбыҙ. Сөнки был кешеләрҙең йәшәп киткәнен, һәм шул дәүерҙә әçәрҙәрен яҙғандарын беләбеҙ.

Ә бит Аллаһтың барлығы был кешеләр йәшәгәнгә ҡарағанда ла асығыраҡ. Сөнки беҙ атаған кешеләр үлгәндәр, уларҙың эштәре туҡталған. Аллаһ бар, уның эшмәкәрлеге мәңгелек, һәм Ул ерҙәге һәр нәмәгә йоғонто яһай. Аллаһтың беҙҙең тормошҡа асыҡтан-асыҡ нисек йоғонто яһағанын күрмәүебеҙ, уның менән аралашмауыбыҙ Уның юҡлығына ишара түгел бит әле. Күптәр Аллаһ менән аралаша, Уның тураһында бүтәндәргә һөйләй ала. Быындай кешеләр өсөн иман ғилемгә тиң. Улар көн дә ғибәҙәт ҡыла, доға уҡый, үтенес-ялбарыуҙарын еткерә, Аллаһы Тәғәләне данлайҙар, ололайҙар һәм Уға шөкөр итәләр. Һәм Ул һәр саҡ уларҙың доғаларына яуап бирә. Даими. Хатта йылына бер йәки унан да һирәгерәк доға ҡылғандар ҙа Унан яуап ала, ләкин был хәлде осраҡлылыҡҡа һылтап, ваҡиғаларҙың ыңғай бер ағышы тип кенә аңлаталар. Йылына бер тапҡыр осраҡлылыҡ булыуы мөмкин. Ләкин һинең доғаларыңа һәр саҡ яуап килеүе - осраҡлылыҡ түгел. Дин тотоусыларҙың тормошондағы ҡайһы бер хәлдәрҙе мөғжизә тип атаусылар ҙа бар, ләкин көндәлек мөғжизә - мөғжизә түгел, ул ысынбарлыҡ. Был - Уның илаһи ҡөҙрәте. Беҙ, мәçәлән, елде күрмәйбеҙ, ләкин ағас мөғжизәүи көс арҡаһында ергә тиклем бөгөлә тимәйбеҙ, шулай бит? Уны ел бөгә. Шулай уҡ беҙ күрмәһәк тә, Аллаһ менән һөйләшкән, күргән кешеләр барлығы тураһында дәлилдәр бар. Улар - рәсүлдәр һәм пәйғәмбәрҙәр.

**Наталья БАХАДОРИ,**

***(Ислам динен ҡабул иткән рус ҡыҙы: "Мин ни өсөн хиджаб кейәм. Аçыл матурлыҡ", "Бәхетле кейәүгә сығыу. Ҡатын-ҡыҙҙарға кәңәш", "Заман хиджабы. Аçыл матурлыҡ", "Камил бала үçтерәбеҙ. Ислам тәрбиәһе матурлығы" һ.б. китаптар авторы).***

# КӨН ХӘҘИСЕ

Муаз ибн Джабал (Аллаһ унан риза булһын) тапшырыуынса, Аллаһы Тәғәләнең Рәсүле (с.ғ.с.) түбәндәге фекерҙе әйткән:

*"Хөкөм Көнөндә кеше ошо нәмәләр тураһында яуап биргәнгә тиклем аяғын ҡыбырлата ла алмаясаҡ: ғүмере һәм уны нисек үткәреүе тураһында; йәшлеге һәм уны нисек файҙаланыуы тураһында; мөлкәте-байлығы һәм уны нисек табыуы һәм нимәгә тотоноуы тураһында; алған ғилеме һәм уның ярҙамында нимәләр эшләүе тураһында".* (ат-Табарани, хәҙис).

■ Тәрән фекер

# БЫЯЛА

- Хәҙрәт, мин бер нәмәне аңлай алмайым: ярлының өйөнә барһаң, ул ихлас ҡаршы ала, хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Ә берәй байға барҙыңмы - ул инде эргә-тирәләге берәүһен дә күрмәй. Аҡса уларҙы шундайға әйләндерәме икән?

- Тәҙрәгә ҡара әле, нимә күрәһең?

- Бер ҡатын бала күтәреп алған, ниндәйҙер йөк тейәлгән арба, баҙарға китеп баралларҙыр...

- Яҡшы. Ә хәҙер көҙгөгә ҡара. Унда нимә күрәһең?

- Унда нимә күрәйем инде мин? Үҙемдән бүтән берәүҙе лә күрмәйем.

- Бына шулай шул: тәҙрә быяланан тора. Ә уға әҙ генә көмөш ҡуштыңмы, үҙеңдән бүтән берәүҙе лә күреп булмай.



Буласаҡ имам

# МОСОЛМАН ЙОРТО

Беренсенән, динебеҙ дошмандары Ислам өммәтенең төп терәге мосолман йорто булыуын аңлап, уны емертеү өсөн төп көстәрен ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға йүнәлтә башланылар. Уларҙы өйөнән сығартып, инабатлығынан, шәриғәт ҡушҡанса кейенеүҙән арындырыр өсөн тырышлыҡ һалыусылар юҡ түгел. Һис шикһеҙ, ҡатын-ҡыҙ ҡыйыш юлға баçһа, уның йорто ла тура юлдан ситләшәсәк. Ә был инде барлыҡ Ислам йәмғиәтен һәләк итеүгә бәрәбәр, сөнки өммәттең күпселе уның артынан эйәрәсәк.

Ир туғандар, ҡыҙ туғандар, беҙ ғаиләләребеҙҙе Аллаһ һәм Уның Рәсүле (с.ғ.с.) ҡушҡанса бағып, балаларыбыҙҙы яҡшы тәрбиә биреп кенә, йәшәү рәүешебеҙгә янаған ят ғәҙәттәргә ҡаршы тора аласаҡбыҙ.

Икенсенән, мин һеҙҙе асыҡтан-асыҡ гонаһ ҡылыуҙан тартынмаған кафырҙарға һәм дәһриҙәргә оҡшарға тырышыуҙан һаҡланырға саҡырам. Улар һымаҡ йәшәргә тырышыу, улар ҡылынғын ҡабатлау - психологик еңелеүҙең һәм йәмғиәттең түбән тәгәрәй барыуын күрһәтә.

Ибн Халдүн шулай тип әйткән: "Еңелгән милләт еңеүсе милләткә оҡшарға тырыша башлай. Шул бәхәсһеҙ: Ислам өммәте - маҡтауға лайыҡ ғәҙел һәм ғорур милләт. Аллаһы Тәғәлә әйткән (яҡынса мәғәнәһе):

"Ысын көс - Аллаһта, Уның Рәсүлендә һәм мосолмандарҙа, ләкин ике йөҙлөләр быны белмәйҙәр" (63:8)".

Йәнә лә Ибн Ғүмәр (р.ғ.) әйтеүенсә, Аллаһ Рәсүле (с.ғ.с.) шулай тигән: "Кемдәрҙер ниндәйҙер икенсе халыҡҡа оҡшарға тырыша икән, улар шулар менән ҡуша ҡубарыласаҡ" (Әбү Дауд, хәҙис).

Мосолмандар Аллаһ Рәсүленә һәм уның сәхәбәләренә оҡшарға тырышырға, уларҙың йәшәү рәүешен өйрәнергә тейеш.

Кафырҙар, ни ҡәҙәр "дәрәжәле", "йоғонтоло" һәм "ҡөҙрәтле" тойолмаһындыр - был донъяла ла, ахирәттә лә еңелгән кешеләр. Хаҡ Тәғәлә әйтә (яҡынса мәғәнәһе): "кафырҙарҙың донъя буйлап йөрөүҙәре (сауҙа менән байыуҙары) һине ҡыҙыҡтырмаһын. Был - ҡыçҡа ғына рәхәтлек, аҙаҡтан уларҙың урыны Йәһәннәмдә буласаҡ. Ниндәй әшәке ул урын! Ә үҙҙәренең Раббыларынан ҡурҡҡандарға түбәнендә йылғалары аҡҡан Йәннәт баҡсалары әҙерләнгән. Улар унда мәңгегә ҡаласаҡ. Быына шулай Аллаһтың бүләге, Аллаһ биргән нәмәләр иманлылар өсөн хәйерлерәк". (3:196-198).

Ир һәм ҡыҙ туғандарыбыҙ, был донъяның байлығы, ләззәте менән файҙаланған боҙоҡ әҙәмдәр тормошона ҡыҙыҡмағыҙ. Байлыҡ туплау, мал йыйыу маҡсатында сәйәхәт иткәндәре, унан өйҙәренә иçән-һау әйләнеп ҡайтҡандары өсөн алданмағыҙ. Ысынында, был ләззәттәр бик ҡыçҡа, әлеге ваҡытлы донъяла тиҙ үтеп юҡҡа сығасаҡ әүрәткестәр генә улар. Һуңынан ундайҙарға - тамуҡ уты, ҡот осҡос урын буласаҡ...

Ә Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡҡан иманлы әҙәмдәр түбәнендә йылғалар аҡҡан ожмахта мәңгегә ҡаласаҡ. Ата-әсәһе, бала-сағаһы алдында үҙенең бурыстарын үтәүселәр өсөн ләззәте лә, әжере лә тулыһынса биреләсәк.

Ислам өммәте Аллаһҡа яҡын торған иманлы әҙәмдәрҙең тормошон өйрәнергә тейеш. Ҡорьәндә Раббыбыҙ шулай ти (яҡынса мәғәнәһе):

"Ибраһимдың динһеҙ халҡына ҡаршы килтергән дәлилдәребеҙ шулай. Беҙ кемгә теләйбеҙ, шуға оло дәрәжәләр бирәбеҙ. Шул хаҡ, һинең Раббың - бөйөк хикмәт эйәһе, барыһын да белеүсе. Беҙ уға Исхаҡ менән Яҡубты бүләк иттек. Беҙ уларҙың икеһен дә тура юлдан алып барҙыҡ. Унан алдараҡ Беҙ Нухты тура юлдан алып барҙыҡ, һәм уның быуындарынан - Дауытты, Сөләймәнде, Әйүбте, Йософты, Мусаны һәм Һарунды. Быына шулай бүләкләйбеҙ Беҙ яҡшылыҡ ҡылғандарҙы. Шулай уҡ - Зәкәрийәне, Йаҳйаны, Исаны, Ильясты. Улар барыһы ла салихтарҙан (изгеләрҙән) ине. Шулай уҡ Исмәғил, Әл-Йәсәғте, Йунис һәм Лутты тура юлдан алып барҙыҡ. Уларҙың бөтәһен дә донъялағы кешеләрҙән өçтөн иттек. Һәм уларҙың ҡайһы берҙәренең аталарын, балаларын һәм туғандарын юғары дәрәжәгә күтәрҙек. Беҙ уларҙы һайлап алдыҡ һәм тура юлдан алып барҙыҡ. Был Аллаһтың юлы, Ул үҙ ҡолдары араһынан кемде теләй, шуны тура юлдан алып бара. Ләкин әгәр ҙә улар Аллаһҡа ширек ҡатыштырһалар, барлыҡ ғәмәлдәре лә бушҡа ғына булған булыр ине. Беҙ уларға Китап, хикмәт һәм пәйғәмбәрлек бирҙек" (6:83:90).

Әгәр ҙә мосолмандар ошо юлдан тайпылмаһалар, үҙ маҡсаттарына өлгәшер өсөн мөмкинлек табасаҡтар һәм лайыҡлы мәртәбәгә, данға ирешәсәктәр, инша Аллаһ.

Өсөнсөнән, мосолмандар Ислам йортоноң иманлы балалар тәрбиәләү мәктәбе икәнен онотмаçҡа тейеш. Ысынлап та, Ислам йорттары - Ислам ғилемен өйрәтеүсе ғалимдарҙы сығарған университеттар бит ул. Шуға ла беҙ үҙебеҙҙең өйҙәге тәрбиәгә оло әһәмиәт бирергә бурыслыбыҙ.

Мин Аллаһы Тәғәләнән йорттарыбыҙҙы яҡшыға үҙгәртеүен, балаларыбыҙға тейешле кимәлдә тәрбиә биреүҙә ярҙам итеүен һорайым. Аллаһ һәр нәмәгә ҡөҙрәтле.

**АБДУЛЛАҺ.**